Күгәрсен районы Мораҡ ауылы

«Күгәрсенкәй» балалар баҡсаһы

# Уртансылар төркөмө өсөн телмәр үҫтереү буйынса асыҡ дәрес

## Тема: «Өндәр иленә сәйәхәт»

Тәрбиәсе: Байназарова Р. К.

Мораҡ – 2020

**Тема:** "Өндәр иленә сәхәйәт"

**Төп белем биреү өлкәһе:** Телмәр үҫеше.

**Белем биреүсе:** ә өнөн дөрөҫ ишетә һәм айыра белеү. Һөйләмдәрҙе һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә күнектереү.

**Үҫтереүсе:** балаларҙың логик фекерләү хәтерен, һәләтен, иғтибарын, ныҡышмалылығын, телмәрен үҫтереү.

**Тәрбиәүи:** балаларҙа яғымлы матур һөйләшергә күнектереү, башҡорт өндәренә һөйөү тәрбиәләү, әсәйгә һәм өләсәйгә һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** предметлы ә өнөнә прендметлы һүрәттәр, төҫлө ҡәләмдәр.

**Дәрес барышы**

Бик күңелле ял иттек

Дәрес башлана хәҙер

Беҙ инде матур итеп

Яуап бирергә әҙер.

Тәрбиәсе: Балалар, бөгөн беҙ һеҙҙең менән хәрефтәр иленә сәйәхәткә барабыҙ. Һеҙ барырға ризамы?

Балалар: Беҙ барырға риза!

Тәрбиәсе: Ә нимәгә ултырып барырбыҙ икән?

Балалар: Поезға.

Тәрбиәсе: Поезд сигнал бирә (һыҙғыртҡысҡа өрөү). Ултырҙыҡ.

Балалар: Шу-шу-шу.

Тәрбиәсе: Шәберәк киттек.

Балалар: Шәп-шәп-шәп.

Тәрбиәсе: Етеп киләбеҙ.

Балалар: Шым-шым-шым.

Тәрбиәсе: Туҡтаныҡ.

Балалар: Ш-ш-ш.

Тәрбиәсе: Бына беҙ хәрефтәр иленә килеп тә еттек. Бында беҙҙе хәрефбикә ҡаршы ала.

Хәрефбикә: Мин һеҙҙе һуҙынҡы өн менән таныштырам.

Тәрбиәсе: Балалар, әйтегеҙ әле, ә хәрефенә ниндәй исемдәр беләһегеҙ?

Балалар: Әклимә, Әнисә, Әлфиә.

Тәрбиәсе: Ә өнө ҡайһы ерҙә ишетелә?

Балалар: Башта һәм аҙаҡта.

Тәрбиәсе: Балалар, икенсе вагонда һеҙ нимәне күрәһегеҙ? (йомаҡ сисеү)

Иртән иртүк тора ул

Ҡысҡыра ул: Ки-ки-ри-күк (Әтәс).

Балалар: Әтәс.

Тәрбиәсе: Әйҙәгеҙ, әтәс булып ҡысҡырайыҡ.

Балалар: Ки-ки-ри-күк.

Тәрбиәсе: Өсөнсө вагонда нимә төшөрөлгән?

Балалар: Сәскә.

Тәрбиәсе: Сәскә ҡайҙа үҫә?

Балалар: Түтәлдә, ерҙә.

Тәрбиәсе: Дүртенсе вагонда нимәне күрәһегеҙ?

Балалар: Бесәй.

Тәрбиәсе: Бармаҡ өсөн күнегеүҙәр бесәй.

Бесәй-бесәй бесәй шул

Үҙе мырлай ҙа мырлай

Әлә ул шулай йырлай.

Тәрбиәсе: Бесәй тигән һүҙҙә ә өнө урталамы, башындамы, аҙағындамы?

Балалар: Уртала.

Тәрбиәсе: Бына иң аҙаҡҡы вагонда нимә төшөрөлгән?

Балалар: Был һүрәттә өләсәй һәм ейәнсәр сәй эсәләр.

Шиғыр ятлау.

Әсәй, өләсәй, ейәнсәр

Өсәүләп сәй эсәләр.

Сәйнүк сәйен эсеп бөткәс,

Самауырға күсәләр.

Әсәй, өләсәй, еңәнсәр

Сәскәләп сәй эсәләр.

Эсмәҫ сакта ла эсерһең,

Сәскәле шул кәсәләр.

Хәрефбикә: Әйҙәгеҙ балалар, уйын уйнап алайык. (туп менән уйын уйнау)

Ә өнөнә кем күберәк һүҙ әйтер.

Балалар: Әсәй, Әсмә, кәзә, Әминә һ.б.

Хәрефбикә: Афарин, балалар! Минең һеҙгә бүләгем бар, был ә өнө. Матур итеп буяғыҙ.

Балалар: Рәхмәт.

Тәрбиәсе: Беҙҙең сәйәхәт тамам. (ә хәрефен төҫлө ҡәләмдәр менән буяу).